ISBN 978-5-91608-181-7 С. 63-65

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.012

УДК 398.8

**Г. Я. Бикбулатова**

*МБОУ СОШ № 6 г. Туймазы*
*ул. Гагарина, 32. г.Туймазы, 452750, Россия*

# МӘКТӘПТЕҢ, ӨҪТӘЛМӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ, ЙӘМӘҒӘТ ОЙОШМАЛАРЫНЫҢ ТУҒАН ТЕЛДЕ ҮҪТЕРЕҮҘӘГЕ РОЛЕ

Сохранение и развитие родных языков – одна из государственных задач, стоящих на современном этапе перед Россией, это особо актуально для многонационального Башкортостана. В статье речь идет о работе школы, образовательных учреждений, общественных организаций в сохранении и развитии родного языка. Автором сделан обзор проводимых мероприятий в школе с участием как самих обучающихся, так и их родителей.

*Ключевые слова:* башкирский язык, родной язык, изучение языка, сохранения языка, развитие языка, школа, образование, роль языка.

“Тел халыҡтың тормошон ғына түгел, ә тормоштоң үҙен билдәләй. Тыуған тел юғалһа, халыҡ та юғала! Халыҡ телендә тел йәшәй икән, тимәк халыҡ та шунса йәшәйәсәк” тип яҙған К. Д. Ушинский. Һәр тел донъяуи мәҙәниәттең ҡиммәте һанала, шуға күрә телде һаҡлау дәүләт өсөн мөһим мәсьәлә булып тора. Бала үҙ халҡының рухи ҡомарҡылары менән бәләкәй саҡтан танышһа, туған телен, тарихын, мәҙәниәтен өйрәнһә, ул үҙе лә рухи яҡтан бай булып үҫә. Беҙ уға был йәһәттән ярҙам итергә тейеш.

Беҙҙең ҡала һәм район мәғариф ойошмалары “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү”, “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында”ғы Дәүләт программалары буйынса ҙур эш алып бара. Был йүнәлештә ғаилә, йәмәғәт ойошмалары ла йәлеп ителгән.

Туған тел уҡытыусыһының эше мәктәп программаһын өйрәнеү, теге йәки был күнегеү буйынса грамматиканы нығытыуҙан ғына тормай. Телде өйрәнеү рус телле балаларға ауыр бирелә, әлбиттә. Әммә өйрәнеүҙе көсләп тағып, белем биреүҙә яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеп булмай.

Хәҙерге заман балалары мәғлүмәти-компьютер технологияларын яҡшы белә, шуға күрә уҡытыусыға ла был йәһәттән бер урында тапанырға ярамай, үҙ өҫтөндә эшләргә кәрәк. Бында инде уҡытыусыға үҙ һөнәренә булған һөйөү һәм уға ижади ҡараш ҡына ярҙам итә. Балалар ижади эшләгән, һәр нәмәгә яуаплы ҡараған уҡытыусыға ылыға. Шуға күрә уҡытыусы балаларҙы ҡыҙыҡһындырыу, уларға ярҙам итеү, туған телде өйрәнеү кәрәклеген аңлау өсөн күп көс һалырға тейеш. Баланың төрлө яҡлап үҫеше өсөн ата-әсәләрҙең һәм йәмәғәтселектең дә ярҙамы мөһим.

Туған тел уҡытыуылары кластан тыш сараларҙы ойоштороуҙа ҡала башҡорттары Ҡоролтайы менән менән дә тығыҙ эш алып бара. Улар тарихи материалдарҙы табып, шәжәрә байрамдарын үткәреүҙә, уҡыусылар араһында гәзит-журналдарға яҙылыуҙа, яҙыусылар, шағирҙар һәм республиканың танылған шәхестәре менән осрашыуҙар үткәреүҙә

ярҙам итә. Уҡытыусылар халҡыбыҙ йолаларын тергеҙеүҙә ярҙам һорап, шулай уҡ “Ағинәйҙәр ҡоро” ағзаларына ла мөрәжәғәт итә. Улар, үҙ сиратында, балалар менән төрлө саралар ойоштора, оҫталыҡ дәрестәре үткәрә.

V Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетында телде үҫтереүҙең төп йүнәлештәренең береһе булып, илдә халыҡ өсөн уңайлыҡтар һәм иртәгәһе көнгә ышаныс уятырлыҡ яңы мәҙәни-экономик мөхит, йола ҡиммәттәре һәм донъя мөмкинлектәренең яңы үҫеш кимәлен булдырыу тора, тиелгән.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып, V Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты “Башҡортостан Республикаһы мәғарифы тураһында”ғы законға ярашлы башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ өйрәнеүҙе ойоштороуҙағы, республика инновацион дөйөм белем биреү ойошмаларын үҫтереү һәм һаҡлауҙы тәьмин итеүҙә, юғары һәм махсус урта белем йорттарына йүнәлтмә менән уҡырға алыуҙа үҙгәрештәр индереү тәҡдимен эшкәртеүҙе кәрәкле тип һанай.

Тыуған иленә, илһөйәрлеккә һөйөү нигеҙе, тыуған ерҙә йәшәү һәм эшкә ынтылыш этно-мәҙәни үҫеш һәм яңы шәхес ҡиммәттәрен булдырыуҙа бер бөтөн булып формалаша ла инде.

Ҡалала балаларының ижади һәләтен үҫтереүҙә Балалар һәм Үҫмерҙәр ижады йорто ла ҙур йоғонто яһай. Бейеү түңәрәктәре коллективтарының, йәш йырсыларҙың сығыштары туған телдә үткән һәр төрлө байрамдарҙың биҙәге.

Халыҡ моңона һөйөү музыка мәктәбендә уятыла. Унда фольклор, халыҡ һәм классик музыка буйынса үҙ эшенең оҫталары эшләй. Ҡурай класы уҡыусылары (етәкселәре Рәмзин Әбсәләмов) республика конкурстары лауреаттары.

Балалар һәм Үҫмерҙәр ижады йортонда, “Туймазы-Арена”, “Олимпиец” спорт комплекстарында эшләгән спорт түңәрәктәре яңы быуында сәләмәт тормош алып барыуҙа ҙур роль уйнай. Тәрбиәләнеүселәр милли көрәш менән дә теләп шөғөлләнә. Мәктәп уҡытыусылары һәм тәрбиәсе-тренерҙар тығыҙ бәйләнештә эшләй. Ошондай берлектәге эш балаларҙың аң һәм физик үҫешендә ыңғай сағыла, уларҙың һәләтен үҫтерегә ярҙам итә. Баланың һәләтен ваҡытында асып, уға дөрөҫ йүнәлеш биреү – төп бурыс.

Эште дөрөҫ ойоштороуҙа һәм аралашыуҙа, уҡыусыларыбыҙҙың ата-әсәләре балаларына ла ҡыҙыҡһыныуҙары буйынса шарттар булдыра. Улар менән төрлө конкурстарҙа һәм спорт ярыштарында ҡатнаша, фәнни-ғәмәли эштәр яҙғанда ярҙам итә.

Тап ошондай берлектәге эштең һөҙөмтәле булыуын үҙ тәжрибәмдән сығып әйтә алам. Мәҫәлән, улдарының башҡорт дәүләт телен өйрәнеүҙәге ҡыҙыҡһыныуын Фоминдар ғаиләһе күтәреп алды, һөҙөмтәлә улдары башҡорт теле буйынса республика олимпиадаһында уңышлы сығыш яһап, маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнде. Бындай балалар күп кенә. Мәҫәлән, йылдың йылы уҡыусыларым муниципаль олимпиадаларҙа призлы урындар ала. Улар – Стрельцова Диана (10-сы класс), Константинов Радмир (9-сы класс), Метельницкий Максим (10-сы класс). Улар башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте һәм йолалары менән ҡыҙыҡһына. Был балаларҙың телгә ҡыҙыҡһыныуы, телде өйрәнеүе иртәгәһе көнгә ышаныс тыуҙыра. Улар башҡорт теле республика теле икәнен, был тел уларҙың киләсәге икәнен яҡшы аңлай.

Юбиляр-яҙыусыларҙың әҫәрҙәренән өҙөк сәхнәләштереү, шағирҙарҙың шиғырҙарын яттан һөйләү йолаға инде. Бында ла минең уҡыусыларым һынатмай – төрлө номинацияларҙа билдәләнеп, ҡыуана. Тиҫтерҙәренең ошондай уңыштарын күреп башҡа балалар ҙа төрлө сараларҙа, конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнашырға теләк белдерә.

Шулай итеп, башҡорт телен уҡытыуҙа һәм уны пропагандалауҙа ата-әсәләргә һәм йәмғәтселеккә таянырға кәрәк. Ата-әсәләр йыйылышында уҡыусыларҙың ҡаҙаныштары тураһында сығыш яһау, уларға рәхмәт хаттары тапшырыу ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Уҡытыусыларҙың ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнеше дәүләт телен бөтә йәмғиәт эшендә ҡулланыуҙың мөмкинлектәрен киңәйтер тип ышанабыҙ.

Кластан тыш эшмәкәрлек өсөн өҫтәлмә сәғәттәр бирелде. Был, үҙ сиратында, туған телдә шөғөлләнгән музыка һәм бейеү, театр сәнғәте белгестәрен йәлеп итергә һәм уларға дәүләт ярҙамын күрһәтергә мөмкинлек бирә.

Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте предметын уҡытыуҙы һаҡлап ҡалыу зарур. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллиндың материалдарын, телетапшырыуҙар алып барыусыһы Булат Кәримовтың тапшырыуҙарын, башҡорт яҙыусыларының Башҡортостан халыҡтары

ҡимммәттәрен ҡулланып ижад ителгән әҫәрҙәре буйынса төшөрөлгән фильмдарҙы мәктәп программаһына индереү – ваҡыт талабы.

Шулай итеп, рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу проблемаларын хәл итеү ойоштороу кимәлендә генә түгел, шулай уҡ фәнни-методик кимәлдә лә талап ителә. Бының өсөн уҡытыусының тик дәреслектә бирелгән эштәр менән сикләнмәүе, ә төрлө саралар ойоштороп, өҫтәлмә материалдар менән эш итеүе, ғаиләне, йәмәғәт ойошмаларын да йәлеп итеүе зарур.

## Әҙәбиәт

Башҡортостан уҡытыусыһы. 2017, № 5.
Әхмәтйәнов К. Ә. Әҙәбиәт теорияһы. Өфө: Китап, 2004. 388 б.

**G. Ya. Bikbulatova**

*Municipal budgetary educational institution Secondary school № 6, Tuimazy*
*st. Gagarin, 32. Tuimazy, 452750, Russia*

## THE ROLE OF SCHOOL, ADDITIONAL EDUCATION, PUBLIC ORGANIZATIONS IN DEVELOPMENT OF THE NATIVE LANGUAGE

Preservation and development of native languages – one of the state tasks facing Russia at the present stage, it is especially important for the multinational Bashkortostan. The article deals with the work of schools, educational institutions, public organizations in the preservation and development of the native language. The author gives an overview of the performed activities in the school with the participation of both pupils and their parents.

*Keywords:* Bashkir language, native language, language learning, language preservation, language development, school, education, the role of language.

## References

Ahmetyanov K. A. Literary devices. Ufa: Kitap, 2004. 388 p.
The teacher of Bashkortostan. 2017, № 5.